# Онотолған әйтемдәр, мәҡәлдәр, һынамыштар

*Фәрит ӘХМӘТОВ*

Батыр – һуғышта, ҡурҡаҡ ҡыуышта үлә.
Батша һарайын таҙартҡансы,
ат һарайын таҙарт.
Егәрле атҡа һүҙ ҙә сыбыртҡы.
Атһыҙ арба алға китмәй,
ирһеҙ ҡатын ал-ял белмәй.
Ата-әсә һүҙе – бала-саға күҙе.
Төҫөң һары булһа ла йөҙөң нурлы булһын.
Артығын һөйләгән аҡылын ашаған.
Ас балыҡ та селәү һайлай.
Ашыҡҡанда артыңа йыш ҡарама.
Алтын теш тә телде тешләй.

Аҡыл бишкә бүленмәй.
Аҡылың етмәһә үтескә алып булмай.
Кәзә һауып ҡына һөткә байып булмай.
Ололар араһында ла аҡыл емештәре өлгөрмәгән
кешеләр осрай.
Алтын балдаҡ кейһәң дә кәкре бармаҡ тураймай.
Атың булмаһа ла хутың булһын.
Әмәлен белмәһәң, балыҡ та тоттормай.
Белмәгән беләгең тыныс булһа ла йөрәгең тыныс булмай.
Балалы тормош – мең хәсрәт, балаһыҙ – бер хәсрәт.
Баш ауырта тип, башты ташҡа ормайҙар.

Эт өрә тип, һин өрмә.
Атҡаҙанған артистар була, президенттар булмай.
Инженер булыуҙан менеджер булыу хәйерлерәк.
Налог залог түгел, уны кире ҡайтармайҙар.
Батшаның ҡоло буғансы, фәкирҙең улы бул.
Сабырлы булһаң, уңырһың.
Хәҙер аҡсаға һөйөүҙе түгел, дейеүҙе лә һатып алалар.
Батшының башы эшләмәһә лә эттәре тешләшә.
Ишәктең дә егәрлеһе була.